*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Донъя биҙәп, күңел нурлап...



### «Ниндәй һын был һыуҙа тирбәлә?»

Алтын тәхет өҫтөндә алтын сәс-тәрен һалындырып, бер ҡыҙ сәс тарап ултыра, унын тирәһендә күк күгәрсендәр уйнай. Һарайы матур күл булған ҡыҙ ай нурына мансы-лып, көн дә ҡоштай ҡойона, ер ҡояшы сыҡҡанда, көлөп, йөҙөп ҡыуана. Ул — нурҙан яралған, һыу иләндә рәхәт ғүмер иткән Һыу-һылыу. Халҡыбыҙҙың «Аҡбуҙат» эпосында һыу ҡыҙы Нәркәс ер улы Һәүбәнгә күңелен асҡанса:

... Төҫөм йәштәй булһа ла,
Күп йыл ғүмер иттем мин.
Батша ҡыҙы булғанға,
Ергә сығып баҡмаған,
Унан ашап еймәгәс,
Һис ғүмерем уҙманы,
Ҡартлыҡ мине еңмәне,
Йәш ҡыҙ булып һаҡланып,
Һылыулығым бөтмәне.
Йөҙөм асһам, ҡояшың,
Оялып, болотҡа инер.
Кемдер күрәш теләһә,
Шуға асһам йөҙөмдө —
Күҙе ҡамашып нур менән
Йығылып уҡ хур булыр.

Мифик һыу ҡыҙындай ер һы-лыуҙары ла булыр: айҙай яҡты йөҙлө, ҡыйғас ҡара ҡашлы, оҙон керпекле, көмөштәй тешле, бал ҡортондай билле, күңеле нурлы, көлөүе назлы, йөрәккә ятышлы. Рәми Ғариповтың «Һыуһылыу» исе-ме шиғырындағыса:

Һыу алырға төшкән баҫмаға,
Баҫмаға ул, гүйә, баҫмаған,
Һыуҙа уйнай ана кәүҙәһе...
Әйттермәһә Хоҙай тәүбәһен,
Һыу батшаһы булыр инем дә,
Эргәһенә сығыр инем дә,
Толомонан алып һылыуҙы,
Ярып китер инем был һыуҙы...
Ниндәй һын был һыуҙа тирбәлә,
Мөхәббәтме тула биҙрәлә?
Кемдең һуң ул яҡты өмөтө,
Ниңә килмәй һаман егете?
Шәфҡәт тә юҡ миңә, юҡ аяу,
Йөрәгемә ҡаҙай уҡ ҡаяу...
Ниңә шулай һыуға йылмая?..

Ҡояштай йылмайып, йәйғорҙай йәмләнеп, ләйсән ямғырҙай күңел-де һуғарып, фәрештәләй бер һын сәхнәлә тирбәлә. «Йәдкәр» фольк-лор-эстрада ансамбле бейеүсеһе Әлфирә Ғариф ҡыҙы Сафиуллина «Һыуһылыу» бейеүе менән нур бу-лып балҡый. Ул йәншишмәләй һыуҙы тылсымлы күнәге менән һөҙөп алып, тирә-яҡҡа һибә, тәби-ғәтте уята, үҫемлектәрҙе йәшәртә, тереклек донъяһын терелтә. Яңыр-ған ерҙә тормош йәмләнә, халыҡ түлләнә.

Башҡорт дәүләт филармония-һының «Йәдкәр» фольклор-эстрада ансамбле Розалия Солтангәрәева сценарийы буйынса ҡуйған «Те-реһыу — тере хәтер» тигән тамаша-ла беҙҙе бар иткән, донъяны үлем-һеҙ, халыҡты мәң тере иткән изге һыу ҡөҙрәтен оло һүҙ, тылсымлы йыр-моң, әүрәткес бейеү менән дә күрһәтә. Илде тибрәүсе, тибрәгән илде биҙәүсе, тереклеккә ғүмер

һуты биреүсе тере һыу — тере хәтер, халыҡтың йыры, һүҙе, моңо, рухын күтәреүсе лә. Шуға ла һыуҙы ҡәҙерләү, ризалау фарыз. Тәбиғәтте рәнйетәһең икән, унның йылан һымаҡ сағыуы ла ихтимал. Әлфирә һылыу «Йылан арбау» бейеүендә арбауын белһәң йылан да ыңғайлауын сағылдыра.

Алдына аҡ әйбер йәйгәс, аҡ һүҙ әйткәс, йылан да усаллашмай, хатта йылан батшаһы мөгөҙөн һалып китә. Яҡшылыҡ менән ил терелә, ғүмер дауам итә, изге Ер балаларын ҡосағында тибрәлтә, ил азаматтары «Мең йәшәһен гәзиз еркәйем!» — тип, йәнтөйәгенә тере һыу бөркә. «Тере һыу — тере хәтер» тамашаһында Әлфирә һылыу сихри бейеүе менән күңелдәре балҡыта, Ер тауышын да ҡәрҙәштәренә ишеттерә:

Мин —Ер-Әсә. Бөйөк Әсә!
Бар тереккә булам Әсә,
Бар халыҡҡа булам Әсә.
Урал минең — йәндәй түрем,
Урал минең — мейем, түлем...

### Сыңрау торнаҡай

Ата-бабаларыбыҙ ер-һыу, йәшеллек солғанышы, төрлө тереклек менән үҙ-ара килешеп, ярашып, аһәңдәш булып йәшәргә ынтылған. Был боронғо ырым-ышаныуҙарға бәйле тыуған риүәйәттәрҙең береһе — «Сыңрау торна»ла ла күҙаллана:

«... Таң менән атын алырға барһа, йәш батыр ғәжәп моңло тауыш ишетеп, аптырап ҡала. Түҙмәй, йүгерә-атлай тауыш килгән яҡҡа китә. Яҡынлашып, күренмәй генә күҙәтә башлай. Ни күрһен — бер төркөм күк торналар аҡлан уртаһында түңәрәкләнеп уйнай. Урталарында яңғыҙ торна баҫып тора. Ул, ҡанаттарын ҡағып, моңло тауыш сығарыу менән, ҡалғандары уға ҡушылып ҡысҡырып, ҡанат ҡағып, түңәрәк буйлап әйләнә. Егет торналарҙың сыңлап сыҡҡан моңло тауыштарын йотлоғоп тыңлай. Шунан, онотолоп ҡуймаһын тип, ҡабатлай-ҡабатлай тиҙ генә күк дүнәнен менә, уҡтай атылып ҡайны йортона ҡайта. Аттан һикереп төшөү менән ҡурайын алып, инде көй булып етешкән торна сыңрауын уйнап ебәрә. Халыҡ йыйыла. Олоһо ла, йәше лә, бала-сағаһы ла ҡалмай. Бер аҡ һаҡаллы ҡарт:

— Быңдай ғәжәп моңло көйҙө ҡайҙан өйрәндең, әллә үҙең сығарҙыңмы? — тип һораған.

— Юҡ, олатай, — ти ҙә егет, ишеткән-күргәндәрен һөйләп бирә.

Халыҡ үҙ-ара геүләшеп китә, күңелдәренә шик-шөбһә төшөп, йорт-илгә бәлә-ҡаза килмәһә ярар ине, тип борсола.

— Был бит сыңрау торналар тауышы. Улар уйнаған ерҙә яу булыр, халыҡ ҡырылыр, тигән ата-олатайҙар, — ти аҡ һаҡаллы ҡарт...»

Риүәйәттән аңлашылыуынса, сыңрау торналар яу булырын, илгә бөлгөнлөк килерен иҫкәрткән. Йәш батыр тирә-яҡҡа оран һалып, ғәскәр туплап, дошман яуын баҫтырған. Егетте ил батыры итеп данлағандар. Шунан бирле сыңрау торналарҙың моңо ҡурайға һалынып, «Сыңрау торна» исеме менән ҡалған.

Сыңрау торна — башҡорт халҡын хәүеф-хәтәрҙән, афәттән араларған изге ҡош. Х быуатҡа ҡараған



”Сыңрау торна”

Ибн-Фаҙлан яҙмаларынан билдәле булыуынса, ниндәйҙер һуғыш ваҡытында дошмандарҙы ҡыуып, башҡорттар еңелә башлағас, көтмәгәндә торналар килеп сығып, сыңрап ебәргән. Торналар тауышын ишеткәс, дошмандар кире яҡҡа әйләнеп һыпыртҡан. Башҡорт батырҙары: «Торналар — беҙҙең тәңребеҙ, улар дошманыбыҙҙы ҡасырға мәжбүр итте», — тигән. Шунан торналарға табына башлағандар. Ҡурайсылар уларҙың сыңрауын моң итеп сыңратҡан.

Халҡыбыҙҙың әле ғүмер иткән нәселдәре лә торналарға изге ҡарашта. «Сыңрау торна» моңон йөрәкһенеп тыңлайбыҙ. Сыңрау торналарҙың сыңрап бейеүҙәрен этнохореограф Лидия Ислам ҡыҙы Нагаева бейеүгә һалды. Уны Әлфирә һылыу Сафиуллина тәрән тойғо, нескә хис менән бар тамашасыны хайран итеп башҡара ла инде. Йыр ҡанатлы, нур ҡанатлы итеп. Тамашасы тын ҡала, онотола. Сыңрау торна сыңрауы, бейеү хозурлығы һәм мөғжизәһе илаһи тылсымы менән арбап, моңһоу ауазы, тойғоһо менән йөрәкһетә, тәрән һағышы менән сорнай. Сихри ҡурай моңо кисерештәрҙе, һағыш тойғоһон тағы ла көсәйтә. Изге торна илемде, еремде ҡурсып, халҡымдың йыуанысы булып, быуаттарҙан быуаттарға талпына. Донъяның бар шатлығын һәм фажиғәләрен, ҡәрҙәштәренең бөтә һөйөнөстәрен һәм көйөнөстәрен йөрәге аша үткәргән, халыҡ, ил яҙмышы өсөн йән атҡан шағирыбыҙ Рәми Ғарипов яҙғанса:

Сыңрай-сыңрай осоп килде
Сыңрау торнаҡай.
Уралыңдан сәләм, тине
Сыңрау торнаҡай.
Уралҡайым, Уралҡайым,
Тыуған Уралҡай!
Иҫән-һау, ти,
Уралтау, ти
Сыңрау торнаҡай.
Юҡ хафа, ти,
Юҡ афәт,ти
Сыңрау торнаҡай.
Илдә ир-ат — Салауат, ти
Сыңрау торнаҡай...

Тамашасы сыңрау торнаны һынландырып бейегән Әлфирә һылыуҡайға хайран. Хозурлыҡты һәм тәрән һағышты, сафлыҡты һәм серлелекте, ҡыуанысты һәм ҡайғы-хәсрәтте символлаштырған тылсымлы ҡоштоң художестволы образын, рухын ҙур оҫталыҡ менән тыуҙыра ул. Әйтерһең, Әлфирә үҙе лә ҡасандыр сыңрау торна булған. Бағыусылар бейеүенең һәләтен нескә тоя һәм кисерештәрен урғылдыра:

— Изге торна йәне, торна һыны был ҡыҙҙа.

— Ҡулдары хәс торна ҡанаты инде, Хоҙайым...

— Буй-һыны ниндәй һомғол, килешле!

Анкарала, Стамбулда төрөк тамашасылары һоҡлана. Өсөнсө концертта Әлфирә сәхнәлә күренмәгәс: «Сыңрау торна ҡайҙа? Сыңрау торна! Сыңрау торна!» — тип саҡыралар. Концерттан һуң Әлфирәне хатта автобуста эҙләп табып: «Рәхмәт һиңә, Сыңрау торна!» — тип арҡаһынан һөйәләр. Әзербайжандың бейеү ансамбле етәксеһе яҡташтарына: «Бейеүсегеҙ — иҫ киткес!» — ти. Кемдәрҙә генә һоҡланыу хистәре уятмай ул! Полад Бюль-Бюль оглы маҡтау һүҙҙәре яуҙыра. Венгрия президенты хайран ҡалып: «Бик күп һылыуҙарҙы күргән бар, ләкин һеҙҙәй һылыуҙы тәү күреүем», — ти. Башҡортостандың Мәскәүҙәге илселегендәге кисәлә Татарстан президенты Минтимер Шәймиев Әлфирәнең күркәмлегенә хозурланып «Заһиҙа», «Ҡурай моңона», «Сыңрау торна», «Ритәйем» бейеүҙәрен һорап бейетә. Һөйкөмлө үә мөләйем башҡорт ҡыҙынан ирегеттәр күҙҙәрен ала алмай. Төркиәләге Ҡаҙағстан илсеһенең бай эшҡыуар дуҫы уға үлеп ғашиҡ була. Әйткәндәй, Ҡаҙағстан илсеһе Әлфирәне нәфис кинофильмда төшөргә өгөтләй. Төркиәнән ҡанатланып ҡайта ул. Мәгәр мөмкинлек юҡлыҡтан бара алмай. Бына шулай сит ерҙәрҙә һәләтлене тиҙ күрәләр, уға йылы һүҙҙәр әйтәләр, ихласлыҡ күрһәтәләр, ә үҙебеҙҙә һанламайҙар. Ниңәлер алтын табылған ерендә ҡәҙерле булмай шул...



**Нурлы йорт**

«Һыуһылыу»ҙың, «Сыңрау торна»ның йәнтөйәге ҡайҙа һуң? Нуриман районының илле йорттан ғына торған Һалдыбаш ауылындағы ҡыҙлы йортта — нурлы йортта икән. Фәрештәләй туғандары Гүзәл, Финзирә, Гөлүсә лә ҡанатланған күркәм йортта. Ҡыҙ баланың һылыу ҙа, тилбер ҙә булыуы яҡшы. Ә был сифаттар нәҫелдән, ата-инәйҙән бирелә. Улар иһә уңған, эшләмәгән эштәре юҡ. Атайҙары хеҙмәт алдынғыһы, балта оҫтаһы, бейма баҫыусы ла. Мәгәр киҫкен тәбиғәтле, ҡыҙҙарына һәләк талапсан. Нәҫел-нәсәпкә ҡартталары Хәйрулла мулланың әхлаҡ-әҙәпкә өгөт-нәсихәте лә һеңгән. Шуға ла ҡыҙҙар тыйнаҡ, тартыныусан, тиҙ уңайһыҙланыусан булып үҫә.

Ата-инәһе балаларын: «Әҙәм балаһы эш менән матур», — тип тәрбиәләй. Буй-һыны бик нәфис булһа ла, Әлфирә көс-ғәйрәт талап иткән эштәрҙән дә ауырһынмай һәм үҙаллы тормош көткәндә лә хәлемдән килмәй тип, ҡаушап ҡалмай. Инәләре бәйләү-сигеүгә, башҡа ҡул эштәренә лә өйрәтә. Ҡыҙ бала ҡыҙ булһын, йондоҙға тиң булһын, тиҙәр. Хеҙмәткә, изгелеккә, хозурлыҡҡа күнегеп үҫә ул. Өйҙәрендә — төрлө-төрлө гөлдәр, баҡсалары шау сәскәгә күмелгән. Үҙе лә сәскә кеүек Әлфирә шул гөл-сәскәләрҙең нәфислеген, наҙын күңеленә һеңдерә. Алғараҡ бағып, шуны ла әйтәйек: атаһы ер ҡуйынына ингәс, Әлфирә инәһен үҙ янына ала. Гастролдәрҙә саҡта инәһе ейәнсәрен ҡарай. Ологайғас иһә, ейәнсәре оләсәһен «өф» итеп тора.

Урман сәнәғәте хужалығына ҡараған Һалдыбаш ауылында башҡорттар менән бергә мишәрҙәр, мариҙар, сыуаштар, немецтар ҙа йәшәй. Уларҙың ҡылыҡ-ҡыланыштарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен дә күреп үҫә Әлфирә. Үҙҙәренең нәҫел-нәсәптәре лә дәртле була. Ҡарттаһы Ғирфан йырлаған, Гөлгөнә ҡартнәһе ҡурайҙа уйнаған. Инәһе спектаклдәрҙә ҡатнаша. «Үҫкәс кем булаһың?» — тип һорағастары, Әлфирә ике йәшендә үк: «Әртис булам, әртис», — тип яуап бирә.

Һинд кинофильмы күрһәтһәләр, клуб шығырым тула. Әлфирә лә ата-инәһенә эйәреп бара, һинд бейеүҙәрен күреп мөкиббән була. Йән генәһе әллә нишләй. Әйтерһең, ул ҡасандыр Һинд иләндә ғүмер иткән дә, йәне шул мәлде иҫләй. Бөтә тәне, күңеле һинд һылыуылай бейей. Уның сикһеҙ тулҡынланыу, һоҡланыу тыуҙырған хәрәкәт-ҡыланыштары күҙ алдынан китмәй. Аҙналар буйы тәрән кисерештәргә бирелеп йөрөй, дәрестәрҙә лә онотолоп, күҙ йәштәре эркелеп ултыра. Шул саҡ үҙе лә һинд ҡыҙҙарына оҡшап китә. Һуңынан бағымсылар әйтеүенсә, үткән тормошта Әлфирә һинд һылыуы булған икән. Бәлки, шуғалыр ҙа ул «Һинд ҡыҙы» бейеүен үтә лә рухланып бейей.

Әлфирәнең бейеү һәләтен тойоп, еҙнәһе уны Стәрлетамаҡ культура-ағартыу училищеһына алып бара. Тәбиғи мөмкинселектәрен күреп, Әлфирәне хореография бүлегенә ҡабул итәләр. Мәгәр ғаиләлә ҡәтғи тәрбиәләү үҙен һиҙҙерә. Үҙен иркен тота алмау, уңайһыҙланыу Әлфирәгә асылып китергә ҡамасаулай. Көҙгө алдында төрлө тән хәрәкәттәре яһарға ояла, мине күрмәһәләр, миңә иғтибар итмәһәләр генә ярар ине, тип уйлай. Ҡасандыр сәхнәлә йөҙәрләгән тамашасы алдында наҙланып, бөгөлөп- һығылып бейерен күҙ алдына ла килтермәй ул. Оялсан, тура ҡарарға ла ҡыймаған ҡыҙҙың бөтә

республикала таныулы булып китеренә күптәр өмөт тә бағламағандыр. Мәгәр уның ҡиәфәтенән, килеш-килбәтенән үк бейеү һәләтен күргән педагог Валентина Васильевна Асхатова:

— Әлфирә, бейе, Хоҙай һиңә барыһын да биргән, — тип дәртләндерә, үҙенә ышаныс уята.

### Йәшәү күрке — бейеү

Училищены тамамлағас, Әлфирә Ҡырмыҫҡалы районының Боҙаяҙ ауыл клубында эшләй. Ә үҙенең күңелен сәхнә, ҙур сәхнә тарта. Бер мәл Өфөнән концерт менән килгән артистарҙан берәү: «Нишләп юғалып йөрөйһөң, филармонияға кил», — ти. Шулай итеп, Әлфирә Өфөлә эш башлай. Валентин Салихов, Николай Осипов, Хазина Мағазова ҡуйған бейеүҙәр менән филармонияның йәштәр төркөмө составында Башҡортостандың төрлө тарафтарында була һәм сәнғәт, бейеү донъяһы Әлфирәне бөтөнләй ялмап ала.

Үҙенсәлекле тауышлы Хөсәйен Ҡудашев «Ҡоҙаса» партияһын башҡарһа, Әлфирә Сафиуллина иһә — Наза ролен. Өмөтлө бейеүсегә Лидия Нагаева бейеүҙәр һала. Зифа буйлы, һығылмалы, тәбиғи грациялы булыуын, төрлө бейеүҙәрҙе үҙенсәлекле башҡарыуын күреп, Рәшиҙә Туйсинаға алмаш килә, тиҙәр. Бәхти Ғайсин «Сиған» бейеүен ҡарағас бейеүсене ысын сиған ҡыҙы кеүек тиеүе Әлфирәнең маһирлығына ишара. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Әлфирә күтәрелмәһен, танылыу тапмаһын өсөн уны баҫырға, батырырға тырышыусылар ҙа була. Фәҡәт үҙ данын ғына ҡайғыртыусылар бихисап шул әле беҙҙең арала. Ярай әле Азат Айытҡолов кеүек алсаҡ күңелләләр, Салауат Итбаев кеүек режиссерҙар хеҙмәтен күрә, дәртләндерә.

Был тормошта ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, бәхете ир-егеткә лә ныҡ бәйле. Хәрби кешегә тормошҡа сығып, Әлфирә Приморье яғына юлланырға мәжбүр була. Унда ҡыҙы тыуа, варьетела эстрада бейеүҙәрен бейей. Күңеле сит мөхитте хушһынмай, тыуған яҡты юҡһына. Биш йылдан һуң Башҡортостанына, үҙенең сыңрау торналар иленә әйләнеп ҡайта, Башҡорт дәүләт филармонияһының фольклор төркөмөнә эшкә урынлаша, шунда асылын, балҡышын таба.

«Аманат», һуңынан «Йәдкәр» тип аталған фольклор-эстрада ансамбле халҡыбыҙҙың йыр-моңон, сәнғәтен, ғөмүмән, бай рухлы мираҫын киләсәккә аманат итеп тапшыра. 1983 йылда уҡ Рәми Ғариповтың «Аманат» ҡобайыры буйынса режиссер Фәтих Ихсанов ҡуйған фольклор тамашаһында башҡорт халҡының тәрән философиялы музыкаль-поэтик ижады, алтын аҡылы хәҙерге быуынға еткерелә. Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһы буйынса режиссер Иршат Сиражетдинов сәхнәләштергән тамаша ла милли үҙенсәлектәрҙе, телде һаҡлау, үҫтереү рухы менән һуғарылған. Роза Солтангәрәеваның «Тере һыу — тере хәтер» тамашаһында (режиссеры Рөстәм Хәлилов) шулай уҡ рухи яңырыу темаһы күтәрелә. Оҙон ғүмер кисергән башҡорт бабайы бөтә тормошон барлап, өй һалдым, баҡса ултырттым, балалар үҫтерҙем — барыһын да эшләнем, буғай, тип уйлай. Һәм һиҫкәнеп китә: ә рухи мираҫ ҡалдырҙыммы һуң? Нәҫелнәсәптән аманат изге теләктәр, ғөрөф-ғәҙәттәр, өгөт-нәсихәт, аң-



*Әлфирә Сафиуллина менән Риф Ғәбитов*

белем, йыр-моң... Һәр олатай-оләсәй, атай-инәй үҙенә ошо һорауҙы бирергә бурыслы. Салауат Итбаев ҡуйған «Мираҫ» тамашаһында үткән заман менән бөгөнгөнө тоташтырған ғүмер мираҫы — ул Ер, Тел, Иман. Ерең барҙа — илең бар, телең барҙа — милләтең бар. Иман — рух. Иман барҙа ғына, әҙәм — әҙәм. Иман үлем менән йәшәү сигендә лә мәңгелек моңауаз булып саҡырып тора, аҡ йырын йырлай. Әсә иһә ошо аҡ йыр, халыҡ йыры һымаҡ күңелдәргә аҫыл уй-тойғолар, яҡты кисерештәр, ҡанатлы өмөттәр һала. «Мираҫ»та йәшәүгә ҡот биргән Әсә — Әлфирә Сафиуллина.

Тәрбиәүи әһәмиәте, тәьҫир көсө ғәйәт ҙур халыҡ ижадын халыҡҡа еткереү йәһәтенән «Йәдкәр» фольклор-эстрада ансамбле баһалап бөткөһөҙ эш башҡара. Йырсылар Мәүлитбай Ғәйнетдинов, Ғәли Хәмзин, Тәнзилә Үҙәнбаева, Хима Йәнбирҙина, Фәриҙә Тимербаева, ҡурайсы Ишморат Илбәков, бейеүселәр Әлфирә Сафиуллина, Миңлеғәли Ханов, думбрасы Илгиҙәр Ғәниев, баянсы Роберт Тимербаев... Улар ҡан ҡәрҙәштәребеҙгә рух ялҡыны, онотолмаҫлыҡ ҡыуаныс илтә. «Йәдкәр» халҡыбыҙҙың рухи мираҫы менән Силәбе, Ҡурған, Ырымбур, Һарытау, Татарстан, Пермь, Мәскәү, йәнә Әзербайжан, Төркиә, Эстония, Германия тамашасыларын да таныштырҙы, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара фестивалдәре лауреаты булып танылды. Бындай киң даирәлә танылыуҙа маһир бейеүсе Әлфирә Сафиуллинаның да өлөшө тос.

Риүәйәттәр, ҡотло һүҙ, илаһи йыр-моң тыңлап, халыҡ «Һыуһылыу», «Сыңрау торна», «Йылан арбау», «Заһиҙа», «Һинд ҡыҙы» бейеүҙәрен мөкиббән булып ҡарай. Әлфирәнең нескәлегенә, һығылмалылығына иҫтәре китеп: «Һинең һөйәктәрең бармы ул, балаҡай?» — тиҙәр. «Бармаҡтары шундай нескә, ҡамыр баҫа аламы икән?» — тип аптырашалар. Ә инде «Фронттан хат» хореографик композицияһын башҡарғанда, һуғыш ветерандары күҙ йәштәренә мансыла, сәхнәгә күтәрелеп, Әлфирәнең арҡаһынан һөйә. «Бабай» бейеүен иһә һылыу ҡыҙ бейей тип баштарына ла килтермәй тамашасы.

Әлфирәнең бейеү оҫталығына тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған артистҡаһы Лидия Нагаева шундай баһа бирә: «Әлфирәлә — Урал характеры. Уның кешелек һыҙаттары һәм сифаттары Урал тәбиғәтенән айырылғыһыҙ. Ул — уйсан, нәфис, үтә лә тыйнаҡ, баҫалҡы һәм шул уҡ ваҡытта романтик рухлы натура. Уның ритмик тән хәрәкәттәре яһау оҫталығы, һығылмалылығы, зифалығы милли характерҙы аныҡ һәм зауыҡлы сағылдыра». Йәнә шуны өҫтәү мөһим: Әлфирә кешенең күркәмлеген, йәшәүҙең бөйөклөгөн поэтик һәм оптимистик образдар аша тыуҙыра. Ул айырыуса «Сыңрау торна», «Һыуһылыу», «Йылан арбау» кеүек мифологик һәм «Заһиҙа» кеүек лирик бейеүҙәрҙе илаһилыҡ, алиһәләрсә хозурлыҡ менән башҡара. Бейеү сәнғәте өлкәһендәге оло ҡаҙаныштары өсөн 2001 йылда Сафиуллина Әлфирә Ғариф ҡыҙына Башҡортостандың атҡаҙанған артистҡаһы исеме бирелде.

Халҡыбыҙҙың тормош-көнкүреше, булмышын, уй-тойғоларын сағылдырған бейеү сәнғәте киң даирәлә танылыу алды. Мәгәр Әлфирәнең фекеренсә, хәҙер бейеү сәнғәтенән халыҡсанлыҡ юғала бара, уға милли рух, милли үҙенсәлек етеңкерәмәй. Халыҡ араһынан бейеү ҡуйыусылар эҙләргә, мәктәптәрҙә бейеү дәрестәре үткәрергә кәрәк.

Әлфирәнең үҙенең халыҡсан бейеүҙәр тыуҙырыуҙағы маһирлығы тәбиғәтте яратыуынан, башҡорт донъяһын, мөхитен хуш күреүенәндер. Урманда, тауҙарҙа, дөрләп янған усаҡ янында уйлана, үҙ-үҙен, йөрәк тауышын тыңлай, тәбиғәт донъяһынан көс-ҡөҙрәт ала ул. Тормош ғәҙелһеҙлектәренән, яман әҙәмдәрҙең ҡаралыҡтарынан йәне әрнегән саҡтарҙа музыка ҡабыҙа ла — онотолоп бейергә төшә. Арыу-талыуҙарын, ҡайғы-хәсрәттәрен бейеү менән сығара, сыңрау торналай сыңрай, Һыуһылыуҙай йөҙөн аса. Аҡ бәхетен ҡанатлы бейеүҙә табып, ил күрке булып нурлана, ил-йортон нурландыра, бейеү менән йәшәрә, йәшәртә, бейеү менән йәшәй.